# Мостай Кәрим – Башҡортостандың Халыҡ шағиры

# Мостай Кәрим



- 1919 йылдың 20 октябрендә хәҙерге Шишмә районының Keләш ауыл крәҫтиән ғаиләһендә тыуған.
- 1941-се йылда Башҡорт дәүләт университетының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай.
- Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән фронтка китә, һуғышта элемтә башлығы һәм артиллерия штабы башлығы булып хеҙмәт итә. Ҡаты йәрәхәтләнә: мина ярсығы күкрәгенә инеп, йөрәгенә саҡ ҡына барып етмәй ҡала.

- Госпиталдә ятып дауаланып сыҡҡас, йәнә фронтҡа китә. Еңеү көнөнәсә фронт гәзиттәрендә хәбәрсе булып эшләй. Һуғыштан ҡайтып килгәс ижади һәм ижтимағи эшкә бирелә
- 1930-сы йылдарҙа уҡ яҙа башлай
- 1938-се йылда «Отряд ҡуҙғалды» тигән беренсе шиғыр йыйынтығы нәшер ителә; 1941-се йылда «Яҙғы тауыштар» тигән шиғыр китабы сыға. Барыһы 100-ҙән ашыу шиғриәт һәм проза китаптары, 10-дан ашыу пьесалары донъя күрә
- Мостай Кәримдең әҫәрҙәре бер нисә тиҫтә телдәргә тәржемә ителгән
- 2005-се йылдың 21-се сентябрендә Өфөлә вафат була. Өфө мосолман зыяратында ерләнгән



# Ҡаҙаныштары:

- Социалистик Хеҙмәт геройы (1979)
- II дәрәжәләге «За заслуги перед Отечеством» ордены (2004  йылдың 9 ноябре)
- III дәрәжәләге «За заслуги перед Отечеством» ордены (1995  йылдың 28 апреле)
- 2 Ленин ордены (1967, 1979)
- I дәрәжәләге Ватан һуғышы ордены (1985)
- II дәрәжәләге Ватан һуғышы ордены (1945)
- Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ Ордены (1955, 1962)
- Халыҡтар Дуҫлығы ордены (1984)
- Ҡыҙыл Йондоҙ ордены (1944)
- Почёт билдәһе ордены (1949)
- РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшлеклеһе (1982)
- БАССР-ҙың халыҡ шағиры (1963)
- Башҡортостандың Фәндәр Академияһының почетлы академигы (1992)
- 1940 йылдан СССР яҙыусылар союзы ағзаһы
- Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге М.А. Шолохов исемендәге халыҡ-ара премия



# Китаптары


КАРА ҺЫУЗАР
Мостай Кәрим
ӨС ТАҒАН


Мостай КӘРИМ
Мостай КӘРИМ
Мостай КӘРИМ
Мостай КӘРИМ
Мостай КӘРИМ
ӘҪӘРҘӘР
1 ТОМ



Халыҡ шағирының монументаль һәйкәленең авторы Мәскәү скульпторы, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы **Андрей Ковальчук**

- Һәйкәл әҙиптең исемен йөрөткән урамдан һәм үҙе оҙаҡ йылдар йәшәгән, ижад иткән йорттан алыҫ түгел урында ҡуйылған. Уның бейеклеге - 6, оҙонлоғо 15 метр. Әҙиптең бронзанан ҡойолған һыны һыу ағып торған гранит нигеҙгә нығытылған. Арҭҡы фонда - ҡош ҡанаты рәүешендәге скульптура композицияһы. Композицияла шағирҙың үҙ ҡулдары менән яҙылған ҡулъяҙмалары һүрәтләнә. Һәйкәлдең горельефында уның әҫәрҙәрендә күтәрелгән мәңгелек темалар сағылыш таба: йөрәгенән ҡоштар осорған авторҙың күккә олғашҡан торналары, "Ай тотолған төндә"нән саф мөхәббәт символдары Аҡъегет менән Зөбәржәт, Башҡортостан ҡайындары, аттар өйөрө, "Ташлама утты, Прометей!", "Салауат", "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ" һәм башҡа әҫәрҙәре геройҙары.

# Мостай Кәримдең тормошо фотоларҙа






Сергей
МИХАЛКО



Армияға китер алдынан төшкән фото. Айырылышыу һағышы йөҙҙәребеҙгә сыҡҡан.





Рауза һәм Мостафа Кәримовтар. 1956 йыл.








www.gasrb.ru


МУСТАЙ КАРИМ
В ЭТОМ ДОМЕ С 1999 ПО 2005 ГГ. ЖИЛ НАРОДНЫЙ ПОЭТ БАШКОРТОСТАНА, ГЕРОЙ СОЦИАЛИСТИЧЕСКОГО ТРУДА, ЛАУРЕАТ ЛЕНИНСКОЙ ПРЕМИИ МУСТАФА САФИЧ КАРИМОВ.


Мостай ағай, студент булғас,
Өфөлә тәүге көндәрен үткәргән йорт.
113






- ҠОШТАР ОСОРАМ

Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә бөгөн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

Аҡлыҡ, хаҡлыҡ өсөн көрәшселәр!
Тәү быләгем һеҙгә, ҡарағыҙ:
Ҡанаттарын ғорур ҡаға-ҡаға
Күтәрелде күккә ҡарағош.

Юлдағылар! Һеҙгә ебәрәмен
Ел-дауылдар үтер торнаны.
Сирлеләрем, кәкүк осорам һеҙгә –
Оҙаҡ-оҙаҡ саҡыра торғанын.

Сығып осто ярһыу бер һандуғас,
Ғашиҡтарым, һеҙҙең өлөшкә.
Көткәндәргә – аҡ күгәрсен килер,
Яңы өмөт өҫтәп өмөткә.

Хыялыйҙар, сая һәм йыуаштар!
Һәммәгеҙгә тейер ҡошом бар.
Ғәмһеҙҙәргә генә һис нәмә юҡ –
Әйҙә улар ҡошһоҙ торһондар.

Ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә һәр көн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

1970






Аяҙҙа ла йонсоу көндәрҙә лә
Ғүмер юлы тигән араны
Уҙған саҡта,
Йондоҙҙарҙай күреп,
Мин күҙҙәргә ҡарап барамын,
Ҡешеләрҙең шат, өмөтлө, моңһоу
Күҙҙәренә ҡарап барамын, —
Юлдарымда аҙашмаҫ өсөн,
Йырҙарымда алдашмаҫ өсөн.

*1963*



Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Ғ. Рәхимов менән. 2003 йыл.



Рәсүл Ғамзатов дуҫын 75 йәше менән тәбрикләй.
1994 йыл.





Ҡыҙы Әлфиә, улы Илгиз, Рауза апай һәм ейәне Тимербулат менән. 1999 йыл.



Һулдан уңға: Рауза ханым, Мостай Кәрим, ейәндәре Тимербулат, кейәүҙәре Олег.

Төҙөнө:
Торомтаева
Рәмилә Юлай ҡыҙы

материалдар интернеттан
алынды